*Рәлис УРАҘҒОЛОВ,*
*журналист*

# РУХЛЫЛАР ТЕҘ СҮКМӘЙ...

*Өсөнсө көн тоташ кар яуа.*
*Өсөнсө көн тоташ, өсөнсө көн*
*Әрней минең иҫке бер яра...*

*Ологайған һайын үҙен нығырак һиҙҙерә был яра. Бәлки, тәндә ғүмерлеккә урын алған, инде алтмыш йылға якын ошо тәнененң бер өлөшөнә әйләнгән яранан да бигерәк, яҙмыш һалғандары йөрәкте нығырак телгеләйҙер. Кеше ологайғас, үҙенең үткән ғүмеренә күҙ һала: нисек йәшәлгән һуң ул, бушка үтмәгәнме? Ошо вакытка тормошондағы иң иҫтәлекле, шатлыклы, йәки йөрәген әрнетеп уйылған хәл-вакиғалар ғына мейе һырҙарына йәбешеп кала. Ҡалғаны хәтер шыйыксаһы менән бергә кибеп оса. Ул мәлдәрҙең кайһыһы тәнгә рәхәтлек бирә, ә кайһылары йөрәккә кан һауҙыра.*

*Тән яраһы епшек кар яуғанда, һытылырға торған болоттар ямғыр алып килгәндә, аркыры иҫкән ел аша сығырҙай булып которғанда һыҙлаһа, тормошонда күргән ғазаптар яңғыҙ калған һәр минутыңды һағалап тора ла үткер бысағын каҙай, хәтер муксайында соксона.*

*Вәли бабайҙың да һуңғы арала бик йыш һүтелә хәтер йомғағы. Бигерәк тә һуғыш йылдарында күргән михнәттәр тынғылык бирмәй — төндәрен һаташтыра, төштәренә ғазаплы юлдарҙа башын һалған дуҫтары инә. Тамуктың үҙендә булдырған, уның ғазаптарын татыткан фанилык бөгөнгө һымак булып күҙ алдына баҫа.*

*Бухенвальд, Дахау, Освенцим, Терезин, Моабит... Беҙ, һуғыштан һуңғы быуын, әҙәм йәнен кыйыусы, меңәр-меңәр кешенең кәүҙәләрен көлгә осороусы крематорийҙарҙы, төрлө тәжрибәләр үткәреүсе «медицина» лабораторияларын, газ камераларын һәм ит турағыстың башка төр короламаларын, тоткондарҙың унда күргән ғазаптарын ишетеп, укып кына белә алабыҙ. Шулай булһын да. Ләкин, бер үк вакытта, бөгөнгө көнөбөҙ өсөн шуларҙы кисергән кешеләргә бурыслы икәнебеҙҙе лә онотторға ярамай. Сөнки уларға тамуктың үҙендә булыу, йәшәү өсөн көрәшеү менән бергә, һуғыштан һуң да илдә тоткондорға булған карашка каршы торорға тура килә. Тән яраларынан да бигерәк, күңел яраһының уңалыуы оҙаккарак һуҙыла, кайһы сакта бөтөнләй уңалмай ҙа.*

Сталиндың: «Беҙҙә хәрби әсирҙәр юҡ», — тип белдереүе фашист лагерҙарына ирекһеҙҙән эләккән бик күп совет һалдаты һәм офицеры өсөн үлем приговорына тиң була. «Әсирлеккә генә эләкмәһәм ярар ине», — тип уйлай Вәли Бикташев та. Ләкин был уға ҡағылмаған да һымаҡ. «Эх, тиҙерәк фашисты еңеп, тыуған яктарға ҡайтырға ла уҡытырға тотонорға ине», — тигән теләк көслө була. Ҡыҙғаныска ҡаршы...

1941 йылдың ноябрендә ҡыҙыл ғәскәрҙәр Ростовты ваҡытлыса ҡулға төшөрә. Бикташев хеҙмәт иткән 14-се гвардия уҡсы дивизияһын Харьковты ҡамарға ебәрәләр. 1942 йылдың ғинуар, февраль айҙарында дивизия Изюм, Барвенко, Лозовой ҡалаларын азат итеүҙә ҡатнаша. Аҙаҡ Харьковҡа сыға. Ләкин шул ваҡыт һуғышта оҫтарып алған немец командованиеһы, Ростовтан сигенгән булып, көс туплаған икән. Частарын бронялы техника



05-2001.p65 24 27.07.01, 11:37



менән тулыландыра, ярҙамға авиацияны саҡыра һәм контрһөжүмгә күсә. Беҙҙең 6-сы, 57-се, 9-сы армияның тулыһынса ҡамауҙа ҡалыу ҡурҡынысы тыуа. Шуға ҡарамаҫтан, алға, «ҡулса» эсенә инә барыуын беләләр. Һәм ҡамау...

— Ун биш көн буйы баш ҡалҡытырлыҡ булманы. Немец төрлө орудиеларҙан, самолеттарҙан бомба яуҙыра. Ҡола яланда ятып ҡалдыҡ, ышыҡланырға ағас ишараты юҡ. Үлектәр, яралылар соҡор тулы. Бөтәһен дә йыйып та бөтөрөрлөк түгел. Аҙыҡ бөттө. Үлгән аттарҙы бешерәбеҙ. Боеприпастар бик аҙ ҡалды, дошманға 50 метр ҡалғас ҡына атырға приказ килде. Үҙәктән сигенеү тураһында бер ниндәй ҙә әмер юҡ, приказ — позицияны тоторға! — тип хәтерләй ул саҡтарҙы элекке кесе командир Бикташев.

21 майҙа ҡамауҙан сығырға бойорола. Дивизияның ҡалған өлөшө Северо-Донецкиға табан йүнәлә. Ут һыҙығы аша ике тәүлек баралар. Бер ҡыуаҡлыҡҡа еткәс, ялға туҡтайҙар. Ошонда башлана ла инде: көтмәгәндә фашистар ҡыуаҡлыҡты бомбаға тота башлай.

— Ҡыуаҡлыҡ ер менән тигеҙләнде. Тере ҡалғандар бер соҡорға төштөк. Самолеттар тынғас, пехоталары китте. Беҙҙе үлеп бөткән тигәндәрҙер инде. Бер атаканы кире ҡаҡтыҡ. Ҡабат бомбаға тоттолар. Шунда мине ниҙер күтәрҙе лә эҫе нәмә ҡыҫып алды, — ти Вәли олатай, ауыр итеп көрһөнөп.

Аңына килгәндә эргәһендә яралылар ыңғыраша, үҙенең умыртҡа һөйәге үлтереп һыҙлай. Торорға ниәтләнә, ләкин ҡаты сәнсеү кире ергә һала. Ян-яҡҡа ҡараһа... Юҡ, ышанғы килмәй — фашист конвойы ыржайып баҫып тора! Ах...

Иртәгеһен әсирҙәрҙе Лозовой ҡалаһына алып китәләр. Ат һарайына урынлаштырғас, уны һәм башҡа шундай тора алмағандарҙы аттарға ашарға һала торған ясләләргә ырғыталар.

— Ун бер шундай яралынан беҙ икәү генә ҡалдыҡ. Яраның асыҡ булмауы ярҙам иткәндер, — тип хәтерләй 84 йәшлек ветеран хәҙер. —Яралары асыҡ булғандарҙың ҡанһыраған ерен себен һырый. Улары, меҫкенкәйҙәр, ҡортлап үлә...

Урынынан да тора алмаған Вәлиҙә береһенең дә эше булмай. Шул саҡта башына бик шәп уй килә: үҙенең коммунист, офицер икәнен йәшереү өсөн исемен үҙгәртергә кәрәк. Бынан ары ул Алексей Васильев булып китә. Әйтергә кәрәк, уны береһе лә һатмай. Был инде яҡшы командир булыуын да күрһәтә. Һалдаттарҙың артына йәшеренеп алышҡа инһә, «командирский» паегын айырым ашап ултырған булһа, кем белә, бәлки берәйһе кемлеген еткерер ҙә ине. Киреһенсә, өс айҙан һуң Вәли Бикташев дуҫтарының үҙен нисек итеп аттырырға бирмәүен белә. Павлоградтағы сираттағы лагерҙа старшина Николай Соколовты осрата. Был турала шул старшина һөйләй ҙә. Баҡһаң, эргәлә шартлаған бомба Вәлиҙе ситкә алып ташлаған да ҡом, балсыҡ, таш өйөмдәре менән өйөп ҡуйған икән. Тик башы ғына күренеп торған командирҙарын һалдаттар соҡоп маташҡанда фашистар уратып ала. Шунда немецтар яралы командирын аттырырға бирмәгән Соколовтың ҡулына ата. Старшина, уң ҡулы өҙөлөп төшөүгә ҡарамаҫтан, Вәлиҙе плащ-накидкала үҙҙәре менән һөйрәп ала.

Вәли яйлап аяҡҡа баҫа, йөрөй башлай. Көндән-көн башында ҡасыу уйы ныға бара. Әмәлгә ҡалғандай, әсирҙәрҙе Германияға оҙаталар. Тауар вагонының башында люк була. Элекке политрук Бикташев, полкташы Николай Ищенко һәм яңы таныштары лейтенант Нестеров шунан сығырға ҡарар итә. Сылғауҙарҙы люк ырғағына бәйләйҙәр ҙә өҫкә үрмәләйҙәр. Бәхеткә күрә, өсөһө лә имгәнмәйенсә ергә һикерә ала. Ләкин оҙаҡ бармайҙар, уларҙы бер украин егете тоттора...

Ҡаты туҡмалыуҙан һуң, былай ҙа яраһы уңалып бөтмәгән Бикташев-Васильевты Германияның Хемер ҡалаһына эшкә оҙаталар. Ул йөк бушатыу-тейәү командаһына эләгә. Йыш ҡына станцияға эшкә йөрөтәләр.



05-2001.p65 25 27.07.01, 11:37

Вәлиҙә тағы ҡасыу теләге көсәйә, һәм ул, күп тә уйлап тормай, көнсығышҡа табан киткән эшелондың алдынан ғына икенсе яҡҡа һикерә. Уға эләгеп Дортмунд ҡалаһына тиклем бара. Тик...

Туҡмалыу, һорау алыуҙан һуң Бикташевты шахтаға эшкә ебәрәләр.

— Мине Фридрих исемле немецҡа беркеттеләр. Уның ҡырына йыш ҡына бүтәндәр йыйыла ине. Бәй, был коммунист булып сыҡты, — тип һөйләй Вәли олатай. — Гитлер армияһы Сталинград янында еңелгәс, быларға ун биш көн бушлай эшләргә ҡушылған икән. Үҙ-ара кәңәшләшкәс, былар шахта ауыҙына паровоз төшөрөргә булдылар. Ары-бире булашҡансы, ун биш көн дә үтәсәк бит инде...

Паровоз шахта ауыҙына оса. Ләкин фашистар был эштә Бикташев-Васильевтан шикләнә башлай. Ярай әле баяғы немецтар Вәлиҙе ҡотҡарырға була. Ике смена алышынған саҡта ғына, тикшереү пунктынан сыҡҡанда, башҡа кейемгә кейендерәләр, немец «номерогын» бирәләр.

Был юлы тәжрибәһе була Вәлиҙең. Сираттағы эшелонға тейәлгән танк аҫтына инеп ята ла, поезд станцияға яҡынлашыуы була, һикереп төшә. Станцияны урап үткәс, тағы бүтән поезды алыштыра. Ләкин Польша еренә етеү менән бик оҙаҡ барырға тура килмәй — бер поляк фашистарға һата.

Ошонда башлана ла инде тамуҡтың үҙе. Бикташевты аңын юғалтҡансы туҡмайҙар, тырнаҡ аҫтарына энә ҡаҙайҙар, бармаҡ быуындарын ишеккә ҡыҫтырып һындыралар...

— Ҡайһы саҡ атһындар өсөн комиссарлығымды асып бирге килде, тик, үлем бер ҡасан да һуң түгел, тип уйланым. Өйҙә тороп ҡалған ҡыҙым, ҡатыным көс бирҙе, — ти Вәли олатай, һынған быуындары сығып-сығып ҡалған бармаҡтарын ыуғалап. — Туҡмайҙар, туҡмайҙар ҙа камераға ырғыталар. Унда ҡырҡлап кеше. Ярауҙан «параша» тулған, һаҫыҡ, тын алырлыҡ түгел. Кешеләр беткә сыҙаша алмай. Ике мәйет һаҫып ята. Ғибрәт инде, ғибрәт...

Был мәлгә Бикташев Васильев фамилияһын Әнүәр Сынташевҡа үҙгәрткән була. Йәлләдтәрҙең һәр һорауына: «Партияһыҙ, рядовой, поездан ҡастым, хәрби әсир», — тип яуап бирә.

Сиратта — Коттерн лагеры. Ул Дахауҙың — фашист тотҡонлоҡтарының тиңе булмаған лагерҙарҙың береһенең — филиалы. Ләкин баш бирмәҫ Башҡортостан егете бында ла бирешмәй, унының гендары азатлыҡҡа ынтыла.

Яңы завод төҙөлөшөнә эшкә йөрөткәндә ҡулына тимер бысҡыһы эләгә. Капитан Гусев һәм медицина өлкән лейтенанты Ряшенко менән был тимер киҫәген өскә бүлеп, табан аҫтарында лазаретҡа алып ҡайталар. Таймаҫ өс тағанда бунтарлыҡ осҡоно ҡабына. Етмәһә, Альп тауҙары ла яҡын, томандар ҙа йыш ҡунаҡ. Тауҙарҙа югослав партизан отрядтары йөрөүе лә өмөт уята.

— Беҙ лазареттың өҫкө ҡатында инек, ә түгеһенә поляк ғаиләләре килтерелгәйне. Бигерәк тә туалет ҡасырға ҡулай эшләнгән. Тәндәрен тәҙрә рәшәткәһен алмашлап бысабыҙ, ләкин өҙөп үк төшөрмәйбеҙ. Барыһы ла әҙер булған көндө йәрәбә һалдыҡ. Тәүҙә Ряшенко сығырға тейеш. Ул китеп алтмышҡа тиклем һанағас, мин сығам, аҙаҡ — Гусев. Мәлен дә иҫәпләнек: һаҡсылар алышынған саҡта 3-4 минут ваҡыт үтә, шуны файҙаланып ҡалырға кәрәк. Мин барғанда Ряшенко еп буйлап төшөргә икеләнеп ултыра. Тиҙерәк, тим. Ул юғалыуы булды, атыу тауыштары ишетелде. Төнө буйы беҙҙең икебеҙҙе туҡманылар, тештәрҙе ҡойоп бөтөрҙөләр. Иртәгәһен Дахауҙың үҙенә алып киттеләр, — Вәли олатайҙың тауышы ҡалтыраны. — Мәхшәр ине унда: Дахауҙа 1933 — 1945 йылдар эсендә барлығы 238 756 кеше үлтерелгән! Мин ошо тамуҡтан ҡотолоусыларҙың береһе.

Бикташевты 27-се блокка урынлаштыралар. Был блок крематорийға «утын» әҙерләп торған, йәғни бер-ике ай шунда яҙалағандар ҙа, медицина һәм башҡа тәжрибәләр үткәргәндән һуң яндырырға оҙатҡандар. Һуңынан инде һауаға һорғолт-һары төтөн генә осҡан, ҡалған көл ашлама урынына баҫыуҙарға һибелгән.

Бикташев-Сынташевҡа был юлы бәхет йылмая. Уны полковник Илларион Панов эҙләп таба. Элегерәк улар карантинда танышҡан булалар. Панов — Башҡортостанда дивизия төҙөшкән кеше. Шуға ла мы, Вәлиҙе яҡын күрә. Ул бында антифашистарҙың йәшерен ойошмаһын етәкләй. Шул уҡ кисте Бикташевты урыҫ табибы Федор Врублевскийға алып киләләр. Федор: «Беҙ һине «үлтерәбеҙ». Һинең номерлы барлыҡ кейемеңде әле генә үлгән кешегә кейҙерәбеҙ, һиңә — уныҡын. Бынан ары исемең Александр Крапивный булыр», — ти. Эҙ юғалтҡансы моргта эшләп алырға тура киләсәген дә еткерә. Ә бер айҙан Вәли-

Александрҙы 6-сы урыҫ блогына күсерәләр.

Бынан ары Бикташев йәшерен ойошма эшенә ныҡлап ылыға, фашистар менән тотҡонда ла көрәшеп булғанлығын аңлай. Тәү сиратта ул көрәш әсирҙәрҙе күңел төшөнкөлөгөнән арындырыу, һатлыҡ йәндәрҙе юҡ итеүҙән, тотҡондарҙы рухи яҡтан Совет Армияһының һәм союздаштарының еңеүенә ышандырыуҙан, башҡа ил әсирҙәренең ойошмалары менән тығыҙ бәйләнеш булдырыуҙан ғибәрәт була. Иң мөһиме — һуғыш бөтөр алдынан Дахауҙағы 70 мең кеше ғүмерен алып ҡалыу. Был шикләнеү юҡҡа булмай: подпольщиктар ҡулына Гиммлерҙың: «Бер генә әсир ҙә дошман ҡулына тере килеш эләгергә тейеш түгел», тигән телеграммаһынан күсермә эләгә. Шунан сығып, йәшерен ойошманы етәкләүҙе генерал Вишневский үҙ ҡулына ала. Ул 100 кеше һайын бер етәксе һайлай. Ситкә сығып атырға булһалар, «бей!» тигән команда күтәргә ҡуша. Бикташев та йөҙ кешене етәкләй.

— 26 апрель көнө ике тәүлеккә «етерлек» аҙыҡ бирҙеләр ҙә тәүге 10 мең кешенән торған колоннаны тауҙарға алып киттеләр. Һәр 100 кешене 10-ар автоматсы һәм 2-шәр эт йөрөтөүсе һаҡлап бара. «Привалда» йәшерен ойошмасылар иркенләп эш итәбеҙ, сөнки конвой уртаға керергә ҡурҡа. Көнө буйы бараһың. Яралыларҙы юлда атып китәләр, ҡасҡандарҙы эттән талаталар...Түҙер әмәл ҡалмағас, былай яйлап бөтөрәсәктәрен аңланыҡ. Һәр 5-әр кешегә берәр конвой бүлештек, — тип һөйләй Вәли олатай. — «Бей!» тигән команда яңғырау менән һаҡсыларға ябырылдыҡ. Ҡарауылдың ҡайһыһын өҙгөләп бөттөк, ҡайһыһы ҡасып ҡотолдо. Беҙ, ҡоралланып, урманға табан йүнәлдек.

Байтаҡ әсир ҙә ҡырылды. Урманда позиция тотҡас, Вишневский 10 кешенән разведка ебәрҙе. Мин дә улар араһында инем. Бер ауылға етәрәк 5 танк күренде. Ҡараһаҡ, бронялары́нда аҡ йондоҙ төшөрөлгән. Танктар туҡтауға, люктан ҡап-ҡара негрҙар сыҡты. Америка негрҙарының танк полкынан икән улар. Ҡосаҡлашабыҙ, илашабыҙ...

Шулай итеп, Вәли Бикташев-Васильев — Сынташев — Крапивный өсөн тотҡонлоҡ сынйыры өҙөлә.

... Бикташевтың үлеме тураһында ҡара ҡағыҙ яҡындарына 41-ҙә үк килгән була. Улар өсөн 1945 йылдың көҙөндә Вәлиҙең ҡайтыуы аяҙ күктә йәшен йәшнәгәндәй тойола. Ҡатыны Ғәлиә был саҡта Ғафури районы Еҙем-Ҡаран мәктәбендә уҡыта, ҡыҙын үҫтерә. Иренең ҡайтыуына өмөтөн өҙмәй ул. Ниһайәт, йәштәр тағы бергә йәшәй башлайҙар.

Лагерҙан лагерға оҙатылып, бик күп михнәттәр күргән Вәли Бикташев ғүмеренең һәр минутын ҡәҙерләргә өйрәнә. Ҡайтыу менән балалар уҡытырға тотона. Шул уҡ ваҡытта Дахау концлагерының йәшерен антифашистик ойошмаһы элегерәк йөкмәткән бурысын да атҡара — «Мы старше своей смерти» тигән китабын яҙа башлай. Әйткәндәй, ул был хеҙмәтенә лагерҙа саҡта уҡ тотонған. Ләкин шешәләргә тултырып йәшерелгән ҡағыҙҙар әсирҙәрҙе алып сығып киткән саҡта тороп ҡала. Шулай булыуына ҡарамаҫтан, хәтеренә ҡан, әрнеүле ғазап менән яҙылған ваҡиғалар мәңге онотолмай — Вәли Бикташев 1966 йылда китап сығара! Был, берҙән, тотҡонлоҡ ғазаптарын үткәндәрҙең, мәрхүмдәрҙең рухтары алдында бурысын үтәү булһа, икенсенән, оло ҡаһарманлыҡ та.

Һуғыштан һуң элекке политрукка әсиргә эләккәнсе күрһәткән батырлыҡтары өсөн I һәм II дәрәжә Ватан һуғышы ордены килә. Ул — халыҡ мәғарифы отличнигы. Вәли олатай тағы бер изге бурысын үтәй — һуғыштан ҡайтмаған ауылдаштарының — Иҫке Төрөмбәт (Дүртөйлө) кешеләренең исемдәрен, ҡайҙа һәләк булыуҙарын архив документтары буйынса тергеҙә. Аҙаҡ инде улар «Хәтер» китабына индерелә. Шулай уҡ 87-се йылда «Ауыл уҡытыусыһы яҙмалары» тигән китап та сығара.

Вәли менән Ғәлиә Бикташевтар ата-әсә иңенә төшкән бурысты ла атҡара. Уларҙың өс балаһы ла юғары белем ала. Вәли олатай әйтмешләй, ейәнейәнсәрҙәре лә Бикташевтар нәҫеленә тап төшөрмәй икән, уҡыуҙа ла, эштә лә һынатмайҙар.

Вәли бабай башҡа ҡарттарҙан бер нисек тә айырылмаған һымаҡ: шул уҡ йыйырсыҡтар, сер һаҡлаусы уйсан күҙҙәр, ҡылғандай сал сәстәр, һәр быуыны тиерлек беленгән ҡулдар... Ләкин ҡартлыҡ уның күҙҙәренән ғәйрәтле осҡондарҙы юя алмаған. Үҙенең тере ҡалыуын, ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәүен Вәли Бикташев рух ныҡлығында күрә. Нәҡ ошо уға артабан йәшәргә һәм көрәшергә лә көс бирә.



05-2001.p65 27 27.07.01, 11:37